Тема: « Ата ҡаҙ менән төлкө» әкиәтен йомғаҡлау.

Маҡсат: хикәйәнең йөкмәткеһен нисек үҙләштереүҙәрен тикшереү; телмәр һәләтлелектәрен, фекерләүҙе үҫтереү; балаларҙа ыңғай сифаттар тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: класс өсөн дәреслек, һүрәттәр, маскалар, таблицалар.

Дәрес барышы

I. Ойоштороу моменты

Дөрөҫ итеп ултырҙыҡ
Дәрес башлана хәҙер
Уҡытыусыны тыңларға
Беҙ һәр ваҡыт әҙер.

II. Дәрестең маҡсатын әйтеү

-- Бөгөн дәрестә «Ата ҡаҙ менән төлкө» әкиәтенең йөкмәткеһе өҫтөндә эшләүҙе дауам итәсәкбеҙ.

III. Фонетик зарядка

1)- бала нисек илай -- ңә-ңә
- быҙау һөттө нисек эсә -- ыңҡ- ыңҡ
- себен осҡанды «ҙ» өнө менән әйтегеҙ – ҙ-ҙ-ҙ
- һыйырҙы нисек саҡырабыҙ – һәү- һәү
- бала теле асылғанда ағаһына кем тип өндәшә – ығғы
- әтәс ҡысҡыра – ки-ки-ри-күк
- ҡаҙ ҡысҡыра – ҡаҡ- ҡаҡ

2) телдәргә күнегеүҙәр
- түбә буяу
- тештәрҙе таҙартыу
- телде туҡмау
- телде сапҡылау
- аттар килә

3) иренгә күнегеүҙәр
- ирендәрҙе алға – артҡа; уңға – һулға.

4) артикуляцион күнегеүҙәр

- һуҙынҡылар таҫмаһын йырлап уҡыу
- тартынҡыларҙы өҙөп, шартлатып уҡыу
- тартынҡыны алға, артҡа, уртаға ҡуйып уҡыу

5) 6 рычаг буйынса уҡыу

Ки- ки- ри- күк,
Тороғоҙ иртүк.
Ға- ға- ға,
Киттек йылғаға.

6) Маскалар менән эш

- Төлкө һәм ҡаҙ тураһында берәр һөйләм төҙөгөҙ:
- Төлкө бик хәйләкәр.
- Димдә ҡаҙ йөҙә.

IV.« Ата ҡаҙ менән төлкө» әкиәтенең йөкмәткеһе өҫтөндә эш.

- Балалар, үткән дәрестә беҙ ниндәй әкиәт уҡығайныҡ?
- Эйе, был әкиәтте һеҙ өйҙә тасуири уҡырға әҙерләнергә тейеш инегеҙ.Беҙ уны һуңғараҡ тикшерербеҙ. Ә хәҙер таҡтаға ҡарағыҙ әле. Һеҙ нимә күрәһегеҙ?(Төлкө менән ҡаҙ һүрәте).
- Төлкө менән ҡаҙ тураһында һеҙ ниндәй шиғырҙар беләһегеҙ?

-- Ҡойроғо көлтә,
Хәйләкәр үтә.
Эҙен артынан,
Һеперep үтә.

-- Яңы яуған ҡар өҫтөнән,
Ҡаҙҙар лап- лап үттеләр.
Ҡыҙыл тәпәйҙәре менән
Йондоҙ яһап киттеләр.

1). Төлкө менән ҡаҙҙы сағыштырыу.

| Төлкө | Ҡаҙ |
|---|---|
| - йәнлек | - ҡош |
| - ҡыҙғылт һары төҫтә | - ала, аҡ, ҡара, һоро |
| - ҡолағы ҡыҫҡа, осло | - күренмәй, әммә бар |
| - морон | - суҡыш |
| - ҡулы, аяғы | - ҡанат, тәпәй |
| - ҡойроғо оҙон, матур, йомшаҡ | - ҡойроғо ҡанаттарҙан тора |
| - холҡо: хәйләкәр | - уҫал |

Нимә менән туҡлана?

| | |
|---|---|
| - тауыҡ, ҡаҙ, әтәс, балыҡ | - үлән, ем |

гә ҡушҡан инем. Әйҙәгеҙ әле, һәр кем үҙенең һүрәтендә нимә төшөрөүе тураһында һөйләһен.

6). Төлкө менән ата ҡаҙҙың һөйләшеүен уйнап күрһәтеү.

7). Йөкмәткеһен һөйләтеү.

V. Йомғаҡлау, баһалау.